*Мәликә ӘМИНЕВА*

# Йәш етәксе һынатмай



Юрматы —иң эре һәм иң боронғо башҡорт ҡәбиләләренең береһе. Тарихи эштәре, тарихи шәхестәре менән борон-борондан дан ҡаҙанған юрматылар.

Торатау, Шәкетау итәктәренә һыйынған, Ағиҙел, Һәләүек, Тәйрүк, Селтербей, Берғамыт, Рәүҙек һәм башҡа йылға буйҙарына урынлашҡан ауылдарҙағы халыҡ — ана шундай данлы ҡәбилә-ырыуҙарҙың, шәхестәрҙең шанлы юлын, маҡтаулы һөнәр-хеҙмәтен дауам иттереүселәр.

Ишембай — ауыл хужалығы районы. Был төбәктә көн иткән халыҡ борондан игенселек һәм малсылыҡ менән шөғөлләнә. Тыуған төйәгендә тынғыһыҙ хеҙмәте, ҙур уңыштары менән халыҡ ихтирамына лайыҡ булған егәрле, үҙ эше өсөн янып йәшәгән уңғандар етерлек бында. Шуларҙың береһе — Башҡортостандың атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре Рәжәп Солтан улы Жданов. Ул 30 йылдан ашыу «III Интернационал» (хәҙер СПК «Интернационал») колхозына етәкселек итә һәм уны районда иң алдынғылар рәтенә сығара. Тирә-яҡтағы бар хужалыҡтар ҡыйралып ятҡанда «Интернационал» ҡаҙаныш артынан ҡаҙаныш яулай. Районда иң тәүҙә асфальт юл бында төҙөлә, һәр йортҡа газ индерелә. Башҡалар йылдар буйы эш хаҡы алмағанда ишәйҙәр хеҙмәтенә күрә аҡсаһын да, премияһын да ала.

Аҡыллы етәксе киләсәк хаҡында алдан уҡ хәстәрлек күрә. Рәжәп Солтан улы пенсияға сыҡмаҫ элек үк үҙенә алмашҡа ауыл тормошон яҡшы белгән,



*Кирбес заводы*

белемле, егәрле, төплө фекерле кеше эҙләй башлай.

Ошо уҡ Ишәй ауылында тыуып үҫкән, Башҡортостан ауыл хужалығы институтында уҡып йөрөгән Эдуард Заһиҙуллинда туҡтала ул.

— Ҡустым, һин уҡып бөт тә үҙебеҙҙең ауылға эшкә ҡайт. Ҡара уны, ситкә китмә, — тип ҡайтҡан һайын иҫкәртеп кенә тора егетте Рәжәп Солтан улы.

Институтты тамамлап, ҡулына диплом алғас, тыуған ауылына ҡайта йәш белгес. Бер көнлөк эш тәжрибәһе булмаған 21 йәшлек егеткә агроном вазифаһын ышанып тапшырырға батырсылыҡ итә өлкән етәксе. Биш йыл тарта агроном йөгөн Эдуард. Бер йыл элек Рәжәп Солтан улы хаҡлы ялға китергә булғас, үҙенең урынына Эдуард Заһиҙуллинды тәҡдим итә. Колхозсылар ҙа, район етәкселәре лә ҡаршы килмәй.

— Мин һәр ваҡыт Рәжәп ағайҙың оло хәстәрен тойоп эшләйем. Ул мине күп нәмәгә өйрәтте, әле лә һәр саҡ ярҙам ҡулын һуҙырға әҙер. Ниндәй һорау борсоһа ла уға йүгереп барам. Бер ваҡытта ла кире бороп ебәрмәй. Аҡыллы кәңәштәре менән көндәлек борсоған мәсьәләләрҙе шунда уҡ хәл итергә булыша. Рәжәп Солтановичҡа оло рәхмәтлемен, — ти йәш рәйес. Остаз өсөн ошонан да ҙур баһа булыуы мөмкинме һуң?

Артыҡ ҙур булмаһа ла электән үк алдынғылар рәтендә килгән хужалыҡты юғары кимәлдән төшөрмәй алып барыуы 27 йәшлек етәксегә еңел түгелдер, әлбиттә. Ике һөтсөлөк фермаһы бар. Һөт һауыу яҡшы бара. Ноябрь айында һәр һыйырҙан тәүлегенә 7 кг һөт һауып алына. Малдар өсөн ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ етерлек, рацион бай.

— 1991 йылда һыу баҫыу сәбәпле сусҡасылыҡҡа ҙур зыян килде. Шунан бирле сусҡаларҙы күпләп үрсетә алмай йонсойбоҙ. Былтыр яҙ 50 баш ата сусҡа алдыҡ. Әле сусҡалар һанын 1200 башҡа еткерҙек. Киләсәктә 3 меңгә тиклем еткерергә иҫәп тотабыҙ, — тип һөйләй Эдуард Ришат улы.

Әлбиттә, хужалыҡтың иң ҙур байлығы — уның уңған хеҙмәтсәндәре. «Колхозсыға ҡарата ни тиклем иғтибарлы булһаң, үҙеңә лә шундай уҡ хөрмәт күрһәтерҙәр», — тип өйрәтә йәш етәксене Рәжәп Солтанович. Шуның өсөн дә Эдуард Ришат улы үҙенә кәңәш һорап йә йомош юллап килеүселәрҙең береһен дә бороп сығармай: һәр ҡайһыһын тыңлай, булдыра алғанса ярҙам итә, йылы һүҙен йәлләмәй. Колхозсылар эш хаҡы иҫәбенә иген, шәкәр, он һәм башҡа тауарҙар ала. Мәҫәлән, шәкәрҙең тоғо баҙарҙа 600-650 һум торһа, бында 500 һум менән бирелә.

Эдуард Ришат улы менән әңгәмәбеҙҙе дауам итәбеҙ.

— Ауылдан йәштәр бик китеп бармай, ахыры. Яңы һалынған йорттар күп күренә, — тип һорайым.

—Ысынлап та, йәштәр ауылда төпләнергә тырыша. Унан һуң, һуңғы йылдарҙа ситтән дә бик күп йәш ғаиләләр ҡайтты. Уларға ҡулдан килгәнсә ярҙам итәбеҙ. Йорт һалып инер өсөн урынын, материалын бирәбеҙ, транспорт менән ярҙамлашабыҙ. Өрҙәнеңы ике урам барлыҡҡа килде. Ҡайтһындар ғына, эш етерлек беҙҙә.

— Белеүегеҙсә, бөтә Рәсәй буйынса яман «сир» таралды — ул эскелек. Был беҙҙең халыҡты рухи яҡтан да, физик яҡтан да юҡҡа сығарыуға алып бара. «Интернационал»да был яҡтан хәлдәр нисегерәк?

— Үҙәкте өҙә инде ул эскелек. Бына тигән эшсән, тырыш егеттәребеҙ бар. Емертеп эшләйҙәр ҙә, игенен дә алалар, аҡсаһын да табалар. Уларҙың балалары ла ҡараулы, донъяһы ла ялт итеп тора. Шул уҡ ваҡытта донъя йәмһеҙләп йөрөүселәр ҙә юҡ түгел. Эскелеккә ҡаршы төрлө саралар ҡулланып ҡарайбыҙ. Иптәштәр судында ла тикшерәбеҙ, штраф та һалабыҙ, — тип үртәнеп һөйләй Эдуард. — Был афәттән ҡотолоу юлдарын тиҙерәк табаһы ине.

— Киләсәккә пландарығыҙ менән дә уртаҡлашһағыҙ ине.

— Уй-хыялдар, башҡараһы эштәр етерлек. Әле бына кирбес заводы төҙөп бөттөк, файҙаланыуға тапшырырға торабыҙ. Заводтың ҡеүәте ҙур — йылына 10 миллион дана кирбес етештерәсәк. Был иһә бөтә районды кирбес менән тәьмин итергә мөмкинлек бирәсәк.

Ит ыҫлау цехы асып ебәрергә лә ниәт бар. Һөт эшкәртеү заводы кәрәк. Бая әйткәнемсә, сусҡасылыҡты киңәйтергә, үҫтерергә ине.

Бына шундай хыялдар менән янып эшләй йәш етәксе Эдуард Ришат улы Заһиҙуллин. Уға ҙур уңыштар, хыялдарының тормошҡа ашыуын теләйһе генә ҡала.